# Район буйлап «Йәшел поезд» елә

2017 Год экологии в России

***Ауыл биләмәләре буйлап китапханалар араһында Экология йылына бағышланған «Йәшел поезд» исемле акция бара. Уның сиктәрендә китапханасылар ауыл халҡы һәм Асҡар үҙәк китапхананан килгән комиссия алдында тирә-яҡ мөхитте һаҡлау темаһына әҙәби сара үткәрә. Геологоразведка китапханасыһы Фәйрүзә Махийәнова Ташбулатта үткәргән шундай кисә яҙыусы Лира Яҡшыбаеваның «Бөтәбеҙгә бер Ер шары» повесына бағышланды. Уны Күсем ауыл клубы мөдире Зөлфирә Ҡарағужина йөкмәткеле итеп алып барҙы.***




Әҫәрҙең сюжеты «XXI быуат һәм кешелек донъяһының глобаль тормошҡа күсеүе» тип аталған халыҡ-ара симпозиум тирәләй ҡоролған. Унда төрлө илдәрҙең ғалимдары, шул иҫәптән үҙ ерен ҡурсалаусы, тәбиғәткә, тыуған иленә бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөхәббәт тойғоһо кисереүсе башҡорт егете Рафиҡ Мөғинов та сығыш яһай. Китапханасы кисәнең сценарийын да шул рәүешле ҡорғайны: залда ултырыусылар симпозиумда ҡатнашыусылар булып сығыш яһаһа, улар алдында башҡорт, төрөк, немец ғалимдары, БМО вәкиле ролен уйнаған Ташбулат мәктәбе уҡыусылары Линар Ҡужәхмәтов, Илһам Ғәҙелшин, Нурислам Хәйбуллин, Нуршат Шаһимәрҙәнов, Ильяс Кейекбирҙин бөтәбеҙгә уртаҡ булған Ер шарын, уның тәбиғәтен нисек һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса телмәр тотто. Тамашасылар араһында үткәрелгән «Ҡайһы ғалимдың фекерен дөрөҫ тип һанайһығыҙ?» тигән һорау алыуҙа күпселек ата-бабаларыбыҙҙан аманат булып ҡалған биләмәләребеҙ менән бергә телде, милләтте һаҡларға саҡырған башҡорт ғалимы иң күп тауыш йыйҙы. Экологик яҡтан кешеләрҙе тик дин аша ғына тәрбиәләргә була тип һанаған төрөктө яҡлаусылар ҙа байтаҡ ине.

Артабан докладтар буйынса фекер алышыуҙа халыҡ әүҙем ҡатнашты: Теләштән Зөһрә Бәшәрова, Айыуһаҙынан Хәмиҙә Хөснитдинова, Геологоразведканан Алмас Әхтәмов, Ташбулаттан Сабит Ғүмәров, Луиза Бикйәнова, Рәйлә Рәхмәтуллина, Күсемдән Рәғиҙә Ғабдуллиналарҙың фекерҙәре төплө булды. Курорт төбәгенә ҡараған, күлдәр янында урынлашҡан ауылдарҙың кешеләрен экологик проблемалар нығыраҡ борсой, улар туристар тарафынан һыуҙың, урмандарҙың бысраныуына ысын күңелдән борсола, мәсьәләне хәл итеү юлдарын эҙләй. Балалар араһынан Линар Ҡужәхмәтов диспутта әүҙем ҡатнашты, заманса, йәштәрсә ҡыйыу уйҙары менән уртаҡлашты. Ул тырышып уҡып, олимпиадаларҙа ҡатнашып, Мәскәүгә Кремль шыршыһына эләгергә ынтылыуы һәм унда Президентты осратһа, уға үҙенең илдәге экологик хәлде яҡшыртыу буйынса фекерҙәрен еткерәсәген әйтеп хайран ҡалдырҙы.

«Бында беҙҙе кем ишетә? Әйҙәгеҙ, ауыл халҡын йыйып, күмәкләп арабыҙҙан бер йәмәғәт экология комиссияһы, уның етәксеһен һайлап, үҙебеҙҙе айырыуса борсоған проблемаларҙы хәл итәйек. Ауылдан-ауылға йөрөп, агитбригадалар рәүешендә Экология йылының эстафетаһын тапшырайыҡ», — тигән берҙәм фекергә килделәр ташбулаттар. Бәлки, ошо бәләкәй генә кисәлә яңғыраған мөһим тәҡдимдәр гәзит ярҙамында бөтә районға таралыр?!..

**Рәхимә МУСИНА.**

* * *

«Йәшел поезд»ың сираттағы туҡталышы Амангилде ауыл биләмәһенә тура килде. Эстафета Амангилде мәҙәниәт йортонда КВН формаһында уҙҙы. Үтәгән ауылы ҡатын-ҡыҙҙары «Йәнтөйәк» исемле командаға, ә Амангилденең пенсия йәшендәге ҡатындары «Ҡыҙылым» командаһына берләшеп, сәхнәгә баҫты. Экология темаһына ҡағылышлы сығыштар бик үҙенсәлекле килеп сыҡты. Китапханасы Миңзәлә Юлмөхәмәтова әҙерләгән шәп сценарий буйынса команда ағзалары ер-һыу атамалары тарихы, иң оҙон йылға, иң бейек тау һәм башҡа шундай һорауҙарға яуап бирҙе. Мәрәкәле формала тирә-яҡ мөхитте һаҡлау кәрәклеге тураһында етди фекерҙәр белдерҙе.

Сара башланыр алдынан клубҡа йыйылған халыҡты Амангилде ауыл биләмәһе башлығы Марат Фәхрисламов тәбрикләп, ағымдағы йылға пландары менән уртаҡлашты. Ул тиҙ серемәй һәм шул арҡала тәбиғәткә ҙур зыян килтергән сүп-сар, атап әйткәндә, пластик һәм алюмин шешәләр, полиэтилен ҡапсыҡтар, быяла ҡалдыҡтар, кәнсир һауыттары кеүек әйберҙәрҙе тоҡҡа тултырып, айырым тапшырыу кәрәклеген әйтте. Башлыҡ был сүп-сарҙы Магнитогорскиҙағы айырып сортировкалау буйынса ҡабул итеү пунктына үҙе ташыясаҡ.

Сара ауылыбыҙҙың моңло тауышлы уҙамандары Садиҡ Шаһыбалов, Фирғәт Өмөтҡужиндың, ирҙәр вокал ансамбленең сығыштары менән байытылды.

**Венера МАНСУРОВА.**